# Тема: Берҙән-берем – ғәзиз ерем.

Маҡсат :

- Башҡортостандың ете мөғжизәһе менән яҡындан таныштырыу;
- улар менән ғорурланыу тойғоһо уятыу һәм уларға һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү;
- уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү;

Йыһазландырыу: Башҡортостандың физик картаһы,слайдтар,мөғжизәләрҙең фотоһүрәтмәләре,музыка.

1. Сәләмләү.
Талғын көй аҫтында:

Ер шарының картаһына

Ҡараһаң яҡшы ғына

Башҡортостан шул картала

Бер япраҡ саҡлы ғына

Башҡортостан – тыуған ерем,

Һиндә тыуҙым, һиндә үҫәмен

Һинән яҡын, һинән гүзәлерәк

Юҡтыр бер ил –шуны беләмен.

-Хәйерле көн, һаумыһығыҙ ҡәҙерле уҡыусылар, уҡытыусылар һәм хөрмәтле ҡунаҡтар!

Һеҙҙе ошо залда күреүебеҙгә бик шатбыҙ һәм ихлас күңелдән сәләмләйбеҙ!

- Уҡыусыларҙың кәйефтәрен һорау .

“Берҙән-берем – ғәзиз ерем“ кисәһен асырға рөхсәт итегеҙ.Был кисәбеҙ тик тыуған илебеҙгә бағышланған.Уның тураһында һөйләшеп китербеҙ.

2. Кешегә иң ғәзизе – Әсә, иң ҡәҙерлеһе – тыуған тупраҡ, иң татлыһы – тәү эскән һыуың, иң йылыһы – һине йылытҡан өй усағы, иң күркәме – тыуған өйөң, иң йәмлеһе – тыуған ер тәбиғәте. Шуны тойоп үҫкән кешенең күңел ҡото бар. Шуларҙы ҡәҙерләгән кеше бөтә әсәләрҙең ғәзизлеген, оло һыуҙың татын, ҙур уттарҙың ҡайнарлығын, яҡты донъяның ҡәҙерен, Тыуған ил тойғоһоноң ололоғон нығыраҡ белә.

Борон ата-бабаларыбыҙ Ер шарының иң киткес гүзәл урынын һайлап, үҙ иткән һәм шунда төбәкләнеп ҡалған. Башҡорт халҡы үҙе лә тауҙар кеүек ғорур, шишмәләр кеүек саф, урмандар кеүек тәрән фекерле булған.

Беҙгә аманат итеп ҡалдырған  тапҡыр һүҙҙәр  әйтемдәрҙә,мәҡәлдәрҙә күренә.Ошо һүҙҙәрҙе иҫләп китәйек

Тыуған ерҙең әреме лә    хуш еҫле.

Ат туйған ерендә,     ир тыуған ерендә.

Тыуған ерҙең туҙаны ла    ҡәҙерле..

Эсер һыуға    төкөрмәйҙәр·

Алтын- көмөш яуған ерҙән    ыуған-үҫкән ил артыҡ.

· Берҙең көнө ил менән,    илдең көнө ер менән.

· Ил ҡәҙерен белмәгән - башын юғалтҡан,    ер ҡәҙерен белмәгән - ашын юғалтҡан.

Афарин,уҡыусылар.Был фәһемле һүҙҙәр беҙҙең күңелдә уйылып ҡалған.

3. Һеҙ белеүегеҙсә

2017 йыл Башҡортостанда Экология һәм айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылы тип иғлан ителде.
Район һәм ҡала округтары хакимиәттәренә — урындарҙа ойоштороу комитеттары булдырырға, йәмәғәтселәргә экологик мәҙәниәтте үҫтереү, тирә-яҡ мөхиткә һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү, тәбиғи мираҫты һаҡлау өсөн яуаплылыҡты арттырыу буйынса эште әүҙемләштерергә кәңәш ителгән.

Илдең экологик үҫеше, биологик төрлөлөктө һаҡлау һәм экологик хәүефһеҙлекте тәьмин итеү мәсьәләләренә йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү өсөн кәрәк тигән фекергә килгәндәр.
Ә нимә ул экология? Яуап биреп ҡарағыҙ әле уҡыусылар.(Фән.

Беҙҙе уратып алған мөхиттең бер-береһенә тәьҫир итеп үҙгәреүе.)

Рәхмәт, төплө яуаптарығыҙға.

Тимәк, уҡыусылар быйыл, тирә яҡ мөхитте, ерҙе, хайуандарҙы, үҫемлектәрҙе, эсәр һыуҙарыбыҙҙы һаҡлау, уларҙы яҡлау йылы.

4. Шағирҙар,яҙыусылар

Шағирҙар,яҙыусылар тыуған ерҙе бәхет сәңгелдәге, тормошто яратыу мәктәбе рәүешендә күҙ алдына баҫтыралар. Тормошҡа һоҡланыу кәмемәһен өсөн, күңелдә тыуған ер тойғоһо менән һәр саҡ яңыртып торорға кәрәклеген иҫбатлайҙар.

- Ай хозур яҡ, данлы Баймаҡ,
Бай тарихлы төйәккәй,
Һинең шанлы шөһрәтеңә
Ғорурлана йөрәккәй.- тип яҙа яҡташыбыҙ, билдәле яҙыусы Абдулхаҡ Игебаев.

Ә хәҙер сәхнә түренә уҡыусыларҙы саҡырабыҙ.

Улар беҙгә шиғырҙар әҙерләгән.

5. **Ә хәҙер китапханасы Ләйсән Хәкимйәновнаға һүҙ бирәйек.**

Башҡортостан, Баймаҡ тураһында **<u>китап күргәҙмәһе</u>** менән таныштырып китеү:

- Тыуған ил, тыуған төйәк, туған халыҡ һәм туған тел – иң мөҡәддәс тойғолар, иң изге төшөнсәләр.
  (Фәриҙә Фазлыева китабы «Уралым – тыуған төйәгем» китабынан уҡырға бит 9)
- - тәбиғәте,
- Хайуандары
- Үҫемлектәре тураһында китаптар менән таныштырыу.
- Ҡыҙыл китап менән таныштырып, хайуандар, үҫемлектәр донъяһын һаҡлауға өндәү.
- 6. Ватанға оло һөйөү тойғолары тыуған ерҙән, ауылдан башлана һәм һәр ваҡытта айырылғыһыҙ үрелеп бара.Тыуған төйәк иң ҡәҙерле, иң гүзәл ер. Сөнки унда таңдар ҙа алһыуыраҡ, кистәр ҙә тынырак, һауа ла тәмлерәк һымаҡ. Донъяның бөтә гүзәллеге беренсе сиратта ошонда - тыуған ерҙә бит.

Тыуған илем, тыуған ерем,

...Матурлығың һинең , бар сафлығың

Йөрәгемә кереп үрелгән.

Улар миңә әсә һөтө менән,

Әсә теле менән бирелгән.

Ярмухаметова Гөлсибәрҙе сәхнә түренә саҡырабыҙ. Үҙенең шиғырын уҡып ишеттерер. Афарин,Гөлсибәр.

7.**<u>Ете мөғжизәһе.</u>**

**Ләйсән Хәкимйәновна, һеҙгә һүҙ.**
**Слайд.**
Баймаҡ яҡтары бигерәк тә матур яҡтарҙан һанала. Шул иҫ киткес бай тәбиғәтле төбәктә Һаҡмар, Таналыҡ йылғалары аға. Был яҡтарҙа Ирәндек тауы кеүек бейек тауҙар ел – дауылдан һаҡлап уратып алған. Аҡ ҡайындар, мәңге йәшел ҡарағай – ҡарағастары, саған ағастарына бөркәнгән мөһәбәтлеге һәм гүзәллеге менән кешеләрҙе хайран ҡалдыра. Емеш – еләккә бай аҡландары, йәшел үҙәндәре, сылтырап аҡкан тау шишмәләре был яктарға тағы ла ҙур ҡөҙрәт өҫтәй. Был мөғжизәле якты һаҡлау беҙҙең изге бурыс. (приложение-1)

8. Әлбиттә, Башкортостаныбыҙҙа мөғжизә булырҙай тағы ла әллә күпме тәбиғәт һәйкәлдәре, ҡомартҡылары бар.

Слайд. Яктыкүл.

Мәҫәлән Мауыҙлы күл. Ул Әбйәлил районы Аскар ауылынан 28 км алыҫлыкта урынлашкан.

Яктыкүлде элек халыҡ Мауыҙлы күл тип йөрөтә ине.Ул күл борон ҡара урман менән уратылған булған.Күлдең эйәһе –ялмауыҙы булған.Был яман Мәскәй күлде өйрөлтөп йөрөткән.Күлгә януар,кош-корт килергә ҡурккан. Һыу эсергә килгән береһен асыулы сағында йотоп алып торған.Хатта күл өҫләп һауанан осоп барған ҡошто ла тартып алған,тиҙәр.Шуға эйәле күлде Мауыҙлы тип атағандар.

Мауыҙлы -ул төпһөҙ тәрән,туймаҫ тигәнде аңлаткан.

Урыҫтар Банное озеро,тиҙәр.Элек ниндәйҙер яу ваҡытында бер урыҫ ғәскәре туктальп,мунса һалып,йыуынып киткән.Мунсаһы тороп калған,шунан урыҫтар Банное озеро тип исем кушкандар. (Легенда буйынса Емельян Пугачёв ғәскәре менән .)

Хәҙер яңыса исем куштылар: Яктыкүл тиҙәр.Уныһын күл һыуының тоноҡ булыуынан әйтәләрҙер инде.Күл һыуы бик тоноҡ, төбө үтә күренеп ята.Көндөҙ төбө лә яп-якты.

Мөғжизәләр күпме генә булмаһын, беҙ уларҙы киләсәк быуынға ла ҡомартҡы итеп алып барып еткерергә тейешбеҙ. Уларға ҡарата ғорурланыу тойғоһо һәм һаҡсыл мөнәсәбәт булдырырға бурыслыбыҙ.

9. БР-ның тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыев. – Тематик сараларҙың планын төҙөгән

Министр белдереүенсә, план буйынса 100-ҙән ашыу сара үткәреү ҡаралған. Улар башлыса ҡалдыҡтарҙы дөрөҫ эшкәртеүгә, һыу объекттарын һаҡлауға, атмосфера һауаһын бысратмауға, махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрен һаҡлау буйынса саралар һәм халыкта тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүгә ҡайтып ҡала.
Шулай уҡ йыл дауамында республиканың сәнәғәт предприятиелары тарафынан киң күләмле проекттар тормошҡа ашасаҡ.

Ҙур кешеләр ҙур эш башҡара.
-Ә беҙ нимә эшләй алабыҙ? Ошо бәләкәс кенә ҡулдарыбыҙ менән.
- Ҡоштар тураһында нимә әйтә алаһығыҙ?(тағараҡ элеү)
- Емеш-еләк ағастары күпме? (Тапамаҫҡа,һындырмаҫҡа.)
-Балыҡсылар бармы беҙҙең арала?Йәки атай-ағайҙарығыҙ?(Һыу буйында нисек тоторға?Таҙа һыуҙа ғына балыктар урсей.)
-Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен дә онотоорға ярамай. Йорт,Бесән өйөмдәре янында ҡый үртәргә ярамай икәнен беләһегеҙ.Был турала иптәштәреңә лә әйтергә онотма.

10. Шәфкәт туташы Фәриғә Йосоповнаға һүҙ бирәйек.

Рәхмәт. Һаулыҡ-һаҡлауға мохтаж байлыҡ.

Һаулығың – байлығың, тип бушҡа әйтмәгәндәр ата-бабалар.

11 Беҙҙең Ватаныбыҙ – Башҡортостан. Башҡортостан...Ошо яғымлы һүҙҙе әйтеү менән ҡолаҡ төбөндә ҡурай моңо, сая бөркөт саңҡылдауы, ат тояҡтары тауышы ишетелеп ҡалғандай була. Йырлап аҡҡан шишмәләр, һалҡын һыулы йылғалар, һырт бирмәҫ ҡаялар, мәғрүр тауҙар, зәңгәрһыу күлдәр, ҡош-ҡортҡа бай урмандар, ҡымыҙ еҫе һеңгән уйсан далалар, ауылдар һәм ҡалалар – һәммәһе лә уның биҙәге, ҡабатланмаҫ йәме.

Сәхнә түренә Салихова Алтынайҙы саҡырабыҙ.

12. Йомғаҡлау
Иң мөһиме - беҙ Башҡортостандың мөғжизәләрен һаҡлай белергә, үҙ республикабыҙҙы һөйөргә һәм уның менән ғорурланырға тейешбеҙ.

Ошоноң менән кисәбеҙ тамам.
Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.
Һау булығыҙ!

(приложение-1)
Уҡыусылар, нимә күренә унда?(*алда Салауат Юлаев һәйкәле күренә*). Был ни мөғжизә?

- **Уҡыусылар яуап бирә:** был Салауат Юлаев һәйкәле.

- Бер укыусы үҙенең белгәндәре тураһында һөйләп бирә.

**Укытыусы һығымта яһап ҡуя:** Скульптор С. Д. Тавасиев ижад иткән был һәйкәл (архитекторы И.С.Ғәйнетдинов) баш калабыҙҙың символы. Ул Ырымбур юлы менән машинала үткәндә лә, самолеттан да бик һәйбәт күренә.

Ысынлап та, Салауат Юлаев һәйкәленең бейеклеге - гранит постаменты менән бергә 19,8 метр, ауырлығы - 40 тонна. Ул суйындан ҡойолған. Уны ижад иткәне өсөн Сосланбек Дафаевич Тавасиевҡа 1970 йылда СССР-ҙың Дәүләт премияһы бирелә.

Бына беренсе мөғжизәне лә таптыҡ. **Беренсе мөғжизә – Салауат Юлаев һәйкәле.**

. Сәйәхәтебеҙ республикабыҙҙың төньяҡ – көнсығышына йүнәлә. Алда ниндәйҙер тау күренә. Был ниндәй тау икән? Слайдтар.

**Яуап**: Башҡортостандың Салауат районында Йүрүҙән йылғаһына һыйынып ҡына тәбиғәттең тылсымлы көсөнә эйә шифалы Янғантау тауы (*картала урыны күрһәтелә*).

- Тауҙың нимәһе мөғжизә булырлыҡ икән?

Был беҙҙең планетала ер аҫтынан бер туктауһыҙ ҙур күләмдә йылылыҡ, эҫе пар, газ сығып торған берҙән бер урын. Тауҙың сере 200 йылдан ашыу ғалимдарҙың иғтибарын йәлеп итеп тора. Тау янында химик элементтарға бай, шифалы Ҡорғаҙаҡ урғыла. **Икенсе мөғжизәбеҙ - Янғантау.**

(*Сылтырап аҡкан шишмә тауышы ишетелә.)*

- Укыусылар үҙҙәре аңлап, дөрөҫ яуап бирәләр.

**Укытыусы. Эйе, был** Красноусол минерал һыуҙары. Улар нимә менән дан тота?

- Укыусылар яуап бирә.

**Укытыусы дөйөмләштереп куя**: был минерал һыуҙар кальций сульфатына, минерал тоҙҙарға һәм файҙалы микроэлементтарға бик бай. Шуның өсөн, һыуҙы дауалау өсөн дә кулланалар.

Тимәк , тағы ла бер мөғжизәбеҙҙе таптык. **Өсөнсө мөғжизә – Красноусол минерал һыуҙары.**

Башкортостандың көньяғында урынлашкан Бөрйән районына килеп еттек. Ниндәй мәмерйә был? Унда нимә бар икән? Әйҙәгеҙ, инеп карайык.

Был ни ғәләмәт? Ниндәй һүрәттәр был?

- **Укыусыларҙы тыңлау.**
- **Укытыусы өҫтәлмә мәғлүмәт бирә**: Еребеҙҙең йөҙөк кашы булған, 2 саҡрымдан ашыу оҙонлокка һуҙылған, данлыклы мөһабәт Шүлгәнташ мәмерйәһе. 1959 йылда унда таш быуаттың тәүге палеолит осоронда, йәғни беҙҙең эраға тиклем 40 – 10 мең йылдар элек, йәшәгән тәүтормош кешеләренең мәмерйә стенаһына төшөрөлгән һүрәттәре табылғас, ул бөтә донъяла танылыу таба. Мәмерйә стеналарында ҡыҙыл буяу (охра) менән ҡырағай ат, мамонт, носорог һүрәттәре эшләнгән.

Был беҙҙең өсөн мөғжизәме , укыусылар? Эйе.

**Укытыусы.** Балалар , мәмерйәнең исеме һеҙгә берәй нимә тураһында һөйләмәйме? Шүлгән + таш.

- **Укыусылар яуап бирә**: Шүлгән – ул Урал батырҙың ағаһы.

**Укытыусы.** Ә Урал батырҙы беҙ кайҙан беләбеҙ?

- **Укыусылар**: Башкорт халкының « Урал батыр» тигән бөйөк эпосы барлығы тураһында әйтәләр. Унда Урал батыр бөтә кешелектең, ер йөҙөндәге тереклектең үлемһеҙлеге өсөн көрәшә.
- Был эпостың әһәмиәте нимәлә?

**Укыусылар :** «Урал батыр» эпосы – башкорт халкының баш китабы. Ул 1910 йылда Мөхәмәтшә Буранғолов тарафынан яҙып алына. Эпос 4576 поэтик юлдан тора.

Тағы ла бер мөғжизәбеҙҙе таптык. **Ул « Урал батыр» эпосы.**
*шул сак кайҙандыр курай моңо ишетелә).*

Ниндәй илаһи моң ағыла .Кайҙан сыға ул моң?

**Укыусылар:** Был – курай моңо.

**Укытыусы.** Нимә ул курай? Тирә - яғыбыҙға ҡарағыҙ әле. Ниндәй үҫемлек янтыбыҙҙа үҫеп ултыра?

Ҡурай – сатыр сәскәләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. Уның бейеклеге 120 -170 см. Ҡурай ҡайын урманы һәм аралаш урмандарҙа ҡуйы үлән араһында үҫә. Ҡурай – ул башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.

Уҡыусылар һеҙ уны тағы ла ҡайҙа күргәнегеҙ бар?

**Уҡыусылар** : Ҡурай үләне башҡорт халҡының символы. Уның ете тажы, берләшкән ете ырыуҙы символлаштыра. Башҡортостандың флагында ла, гербында ла ҡурайҙың ете тажы һүрәтләнгән.

**Алтынсы мөғжизә - ҡурай.**

**Уҡытыусы**.Тирә – яғыбыҙ сәскәләргә күмелгән болон. Болон буйлап атлайыҡ. Бәлки, сәскәләр араһында яталыр беҙҙең мөғжизә?(*Бал ҡорттарының гөжләүе ишетелә).*

Уҡыусылар, был ниндәй тауыш?

**Уҡыусылар**: Был бал ҡорттарының гөжләүе.

**Уҡытыусы.** Улар нимә эшләй? Ни өсөн сәскәләргә ҡунғандар?

**Уҡыусылар**: Улар сәскәләрҙән бал йыя.

Тимәк , **беҙҙең етенсе мөғжизәбеҙ табылды мы инде**

Башҡорт ере – урман – дала,
Башҡорт балҡайы – дауа...

Башҡорт халҡы борондан ҡортсолоҡ шөғөлө менән дан тотҡан.Нисәмә быуаттар буйы нисек кенә үҙгәрһә лә ата –бабаларыбыҙ ҡортсолоҡ кәсебен юғалтмаған «Ҡортсолоҡ кәсебендә башҡорттарға тиңләшеүсе халыҡ юҡтыр,» - тип яҙып ҡалдырғандар.Бөтмәҫ-төкәнмәҫ донья һынауҙары аша үтеп был кәсепте һаҡлай, хата беҙҙең быуынға еткерә алғандар.

Балдың файҙаһын тәүтормош кешеләре үк белгән . Улар ҡорт ояһын табып нектарын тәмләп ҡарағас, балды йыя башлағандар,балдың файҙаһын һиҙгәс, дауалауҙа ҡуллана башлағандар.

Египетта балды аҙыҡты консервалауҙа ҡулланғандар. Бигерәктә алыҫ походта,косметикала, ауырыуҙарҙы дауалауҙа ҡулланғандар.

Һиндостанда балды йылан ағыуына ҡаршы ҡулланғандар.

Грецияла ла балды яҡшы белгәндәр һәм киң ҡулланғандар. Александр Македонский үлгәс, уның тәне боҙолмаһын өсөн, балға һалып(йәйҙең эҫе көндәрендә) Александрия ҡалаһына алып барғандар(2500км).

Ҡытайҙа ла балды дарыу итеп ҡулланғандар:эске органдарҙы дауалаған-дар,температураны төшөргәндәр,хәлһеҙ кешеләрҙе дауалағандар.Балды күп ҡулланған кешеләр йәшәргән һәм оҙаҡ йәшәгән.

Японлар балды тәбиғи продукттың короле тип атағандар.Улар ҙа балды дауалауҙа киң ҡулланғандар.

Японияла ғы Хиросима һәм Нагасаки ҡалаларына атом һөжүменән һуң, япон ғалимдары халҡына бал ашарға тәҡдим иткәндәр. Японияла ғы һәр уҡыусы хөкүмәт тарафынан көн һайын бер ҡалаҡ бал ашай.Японияла егәрле бөжәккә-ҡортҡа һәйкәл ҡуйылған. Ундай һәйкәл Польшала ла бар.

Боронғо Римдә гладиаторҙар үлемесле көрәшкә сығыр алдынан бал ашағандар. Ул хәҙер ҙә космонавтарҙың һәм спортсмендарҙың рационына инә. Балда В1,В2 ,В3,

B6,C, K, E, A витаминдары бар. Кешегә B һәм C витаминдары етешмәһә,төрлө ауырыуҙар килеп сыға: йөрәк һәм ҡан тамыры,нерва системалары.Шулай уҡ хәлһеҙлек, баш ауыртыуы, йөрәк ауыртыуы булырға мөмкин.

**Йүкә балы- иң сифатлы бал тип һанала**, аҡһыл һарғылт төҫтә була. Ул бик файҙалы.

Балалар аҙығында балдың әһәмиәте бик ҙур.

Беҙҙең эраға тиклем 900 йыл элек гректар һәм германдар балаларҙы ашатыу өсөн балды, һөттө, иретелгән майҙы ҡушып ашатҡандар, яңы тыуған баланың ауыҙына бер нисә тамсы бал тамыҙғандар. Балды ҡулланыу кальций һәм магнийҙы үҙләштерергә ярҙам иткән, баланың һөйәген нығытҡан.

Боронғо Египетта балды мәктәптәрҙә биргәндәр һәм бал ашаған уҡыусылар физик һәм аҡыл яғынан үҫешкән, талантлы булғандар.

Кәрәҙ - ул балға тәбиғәт тарафынан бирелгән һауыт. Һауыты менән ҡуша балды ашап була.Балауыҙҙы оҙаҡ итеп сәйнәргә кәрәк,айырыуса ҡара икмәк менән ашау файҙалы. Кәрәҙле бал туңмай, йылдар буйы яҡшы һаҡлана. Ул бал таҙа, уны хатта ҡайнаған һыу менән ҡатыштырып күҙгә тамыҙырға була.

Башҡорт балы донъя кимәлендә лә ҙур урын биләй.

Башҡорт балы- күп һанлы йәрминкәләр һәм күргәҙмәләр еңеүсеһе.

Беренсе тапҡыр башҡорт балы 1900 йылда Францияла Бөтә Донъя Париж йәрминкәһендә алтын миҙал менән бүләкләнә.

- 1961 йылда Эрфурт ҡалаһында ( Германия) – алтын миҙал;
- 1965 йылда Бухарест ҡалаһында( Румыния) XX Халыҡ- ара Апимондия конгресында көмөш миҙал;
- 1971 йылда Мәскәү ҡалаһында XXIII Халыҡ-ара Апимондия конгресында алтын миҙал;
-2002 йылда Берлинда « Йәшел аҙна» күргәҙмәһендә юғары награда;
-2001-2004 йылда Санкт-Петербургта «Рәсәй фермеры» -« Агрогусь» күргәҙмә-йәрминкәһендә юғары награда яулай.
-2009 йылда Башҡортостандың Ете мөғжизәһенең береһе булды.

**5. Ҡабатлау.** Шулай итеп, беҙ һеҙҙең менән Башкортостандың ете мөғжизәһен табып бөттөк.